**Йыһат Солтанов**

# КАРТАЛАРЗА БАШҠОРТТАР

## Тарих һәм сәйәсәт

Теләгән бер илдә, теләгән бер режим хакимиәтендә тарих фәне сәйәсәткә бәйле булды, була һәм буласаҡ, сөнки хакимлыҡ ҡылыусы партия, төркөм, монарх, диктатор һәм шулай уҡ илдә күпселек тәшкил итеп өҫтөнлөк алған этнос тарих тигән ҡөҙрәтле идеологик ҡоралды үҙ ҡулында тоторға, үҙ файҙаһына егергә -- был өлкәнең монополисы булырға тырыша. Ошо классик хәл Рәсәй империяһының өҫтөнлөк итеүсе этносының мәғрифәтле вәкилдәре тарафынан булдырылған һәм шул этносҡа хеҙмәт иткән *урыҫ тарих мәктәбенең* күп быуатлыҡ эшмәкәрлегендә сағыла. Һуңғы 350 йыл буйына бөтә көстәренән улар был мәктәптең нигеҙҙәрен һипләне һәм өҫкоролмаларын нығытты, империя ҡыҫаһындағы төрлө халыҡтарҙың империяға *итәғәтле* зыялыларын *урыҫ тарих мәктәбе* аша үткәреп тәрбиәләне, көслө дәүләт аппаратының бөтә сараларын ҡулланып, шул мәктәптең рухи ҡолдарының тотороҡло ҡатламын барлыҡҡа килтерҙе; быны үҙебеҙҙең сағыштырмаса бәләкәй халҡыбыҙҙың рухи тормошонда күп күрҙек һәм күрәбеҙ – империя мәктәптәре аша ғилми дәрәжәләргә ирешкән “белгес”тәребеҙҙең күпселеге, үҙ баштары менән түгел, ә “юғарынан” алмаштырып ҡуйылған сүлмәкбаш менән эшләй. Шуға күрә ошоғаса үҙебеҙҙең *ысын* тарихыбыҙҙы белмәйбеҙ, йәки, белһәк тә, өҫтөнән тапап үтәбеҙ. Ғалимдарыбыҙҙың шул ҡылыйлығы милли мәҙәниәт әһелдәренә күсә лә шулар аша хәтерһеҙлек сире халҡыбыҙға таратыла – маңҡорттарыбыҙ ярала. Быны күргәҙмәле һабағы итеп Башҡортостандың халыҡ шағиры дәрәжәһенә ирешкән һәм хатта ҡыҙыл империяның алтын йондоҙо менән бүләкләнгән инсаныбыҙ эшмәкәрлегенән бер-нисә үрнәк килтереү ҙә етә:

*«По обе стороны от Урала — от Волги до Иртыша* (шулай ҙа ҡабул ҡылған бит тарихи Башҡортостандың мин билдәләгән сиктәрен! — *Й.С.*) — *на протяжении тысячелетия* ***скитались*** *башкирские племена, гонимые всеми ветрами исторической судьбы* (Башҡортостан тигән илебеҙ булмаған!.. — *Й.С.*)... *Вплоть до 1919 года...* ***не имели*** *ни своей собственной крыши над головой, ни прочной ограды на рубежах, иными словами,* ***не имели*** *своей государственности».* (М. Карим. Тепло родного очага. «Советская Башкирия» гәзитенең 1972 йыл 1 май һаны). Һәм йәнә:

*«Беҙ* ***фәҡир*** *булдыҡ... Беҙ* ***артта ҡалғайныҡ...*** *Беҙ...* ***белемле түгел инек...*** *Әлбиттә, ул алыҫ замандарҙа ла, мәҫәлән, Парижға беҙҙең йырсыны йәки ҡурайсыны* (бөйөк ҡурайсыбыҙ Йомабай Иҫәнбаевты йәғни. – *Й.С.*) *алып барыр булғандар, ләкин бүтәндәрҙе шаҡ-ҡатырған өсөн* ***ҡырағай кеше*** *итеп күрһәтергә саҡырғандар».* (Мостай Кәрим. Бөйөк Октябрь революцияһының 70 йыллығы айҡанлы Башҡорт опера һәм балет академия театрында тантаналы ултырышта һөйләгән телмәренән. «Совет Башҡортостаны» гәзитенең 1987 йыл 6 ноябрь һаны).

*«Мине һәр саҡта ла күңел төпкөлөнән сыҡҡан ике тойғо етәкләне,* — ти ул, — *совет интернационализмы һәм милли үҙаң. Бында мин милли үҙаңды милли*

*ирәбелектең һәм милли тыйнаҡлыҡтың юғары сағылышы тип аңланым һәм аңлайым. Ҡайһы саҡта ана шул тыйнаҡлыҡты юғалтыуҙы төҫмөрләһәм, үкенесле булып китә. Был, мәҫәлән, ҡайһы бер әҙәбиәтсе һәм тарихсыларҙың ата-бабаларҙың культура тарихындағы сигенә сыҡҡыһыҙ мәртәбәләрен дәғүәләүҙә, дөйөм төрки, хатта дөйөм кешелек ҡомартҡыларынан бары тик үҙенекен, бары тик «беҙҙең» һыныҡты ғына һындырырға маташыуында сағылыш таба. Ундай юл менән барһаҡ, беҙҙең боронғо затырыуыбыҙ тәгәрмәс майын кешелек тәгәрмәстең үҙен уйлап тапҡанға тиклем үк әҙерләй башлаған, тип анһат ҡына иҫбатларға ла мөмкин»...* (Мостай Кәрим. XXXVII Башҡортостан өлкә партия конференцияһында һөйләгән телмәренән. «Совет Башҡортостаны» гәзитенең 1984 йыл 21 ғинуар һаны).

**Аңлатма:** «Ағиҙел» журналының 1982 һәм 1984 йылдарҙағы дүрт һанында Йыһат Солтановтың «Урал батыр шәжәрәһе» тигән тәүәрихе ташҡа баҫылып, журналдың йыллыҡ бүләгенә лә лайыҡлы булғайны һәм был хеҙмәттә йылҡы малын беренсе башлап ҡулға эйәләштереү, донъялағы беренсе арасалы тәгәрмәсте яһау үҙебеҙҙең Уралда — башҡорт бабалар тарафынан башҡарылыуы комплекслы тикшеренеүҙәргә таянып иҫбатланғайны...

1984 йыл, «Совет Башҡортостаны» гәзитенең 21 июнь һанында:

*«РСФСР-ҙың унынсы саҡырылыш Верховный Советының туғыҙынсы сессияһында КПСС Үҙәк Комитетының апрель (1984 йыл) Пленумы, СССР-ҙың ун беренсе саҡырылыш Верховный Советының беренсе сессияһы ҡарарҙары, КПСС Үҙәк Комитетының Генарльный секретаре, СССР Верховный Советы Президиумы Председателе К.У. Черненконың уларҙа яһаған сығыштары нигеҙендә Россия Федерацияһы халыҡ депутаттары Советтарының бурыстары тикшерелә. 20 июндә ул Мәскәүҙә Кремлдең Ҙур һарайында эшен дауам итте.*

*Депутаттар һәм ҡунаҡтар В.И. Воротников, Г.В. Романов, В.В. Кузнецов, И.В. Капитонов иптәштәрҙе оҙаҡ ҡул сабыуҙар менән ҡаршы алды».*

Ҡайһындай ҙа ҙур форум һәм ҡайһындай ҙа мәртәбәле кешеләр! Бөйөк держапаның бөйөк мәсьәләләрен уртаға һалып хәл ҡылырлыҡ был оло йыйынға Башҡортостан вәкиле лә республикабыҙҙың, халҡыбыҙҙың ошоғаса хәл ҡылынмаған ихтыяждарын һәм мохтажлыҡтарын ҡыйыу илтеп һалғандыр ҙа хәл ителеүенә өлгәшкәндер, тигән өмөт уяна. Әммә-ләкин...

Бына шул бөйөк форумда Башҡорт АССР-ы Әлшәй һайлау округынан халыҡ депутаты, РСФСР Верховный Советы Председателенең урынбаҫары М. С. Кәримов (Мостай Кәрим) телмәренең «изюминка»һы:

*«Ҡайһы берҙә теге йәки был йән көйҙөргөс факттарҙы осратырға тура килә... Милли республикаларҙан, милли тыйнаҡлыҡ һәм фәнни объективлыҡ тойғоһон юғалтҡан бәғзе бер тарихсылар йәки әҙәбиәтселәр тарихты күпертеп күрһәтеүгә, үткәндәрҙе ал да гөл итеп тасуирларға тотона, боронғо ҡомартҡыларҙан үҙенә өлөш ҡайырырға һәм шунда үҙ мөһөрөн баҫырға тырыша; йәнәһе, улар башҡалар көнләшһен өсөн бик боронғо культураға ҡыҫылышы барлығын иҫбатламаҡсы.* ***Бер милли әҙип[1] нәҡ уның ата-олатайҙарының тәгәрмәсте уйлап табыуын тылҡый.*** *Бындай саҡта инде башҡа берәүгә тәгәрмәс майлау өсөн дегет ҡайнатҡандарын иҫбатларға тотоноу бер ни тормай; имеш, тегеләр тәгәрмәс менән булашҡанда уныҡылар дегетте күпкә*

[1] Йыһат Солтанов, әлбиттә!

*элегерәк яһаған. Үткәндәргә ошондай, әгәр әйтергә рөхсәт икән, «киң» ҡараш — беҙҙең социалистик тормошобоҙ нормаларына бер нисек тә тап килмәгән* ***милли сикләнгәнлек***[2] *билдәһе ул».*

Иллә тапҡан даһа Башҡортостан исеменән бөйөк держава форумында хәл ҡылаһы олуғ проблеманы!..

Донъяға танылған әҙип Сыңғыҙ Айытматовтың әсе иронияһы яңғыраны тап шул осорҙа:

*«Что же это за национальная культура, которая не имеет своей базы?*

*Но когда подобные болевые мысли высказываются, то тут же находятся люди, которые начинают рассматривать это как* ***проявление национализма, узости взглядов.*** *К сожалению, этот зуд сверхбдительности, проистекающей в немалой степени от* ***карьеризма,*** *не встречает должного осуждения. Необходимо отметить в связи с этим, что в результате такая тенденция породила на местах особый тип* ***демагога — говоруна-трибунщика,*** *который сделал для себя восхваление русского языка к месту и не к месту и умаление собственного чуть ли не престижной профессией».* («Литературная газета»ның 1986 йыл 13 август һаны).

Һәм бына бөйөк Мөхәммәтша Буранғоловтың, килер быуындар өсөн башҡорт тарихын һаҡлап ҡалған фидаиҙың, шул эше өсөн баяғылар тарафынан ҡаты эҙәрлекләнеүе тураһындағы шаһәҙәтнамәһе:

***Первому секретарю ЦК КПСС, Председателю Совета Министров СССР т. Хрущеву Н.С. —***

*от писателя, народного сасяня Башкирской АССР Бурангулова Мухамедши Абдрахмановича, г. Уфа, ул. Мингажева, 125, кв. 45*

***Заявление***

*...Однако некоторые клеветники, любители дешевой славы, которые занимались творением из мухи слона и пользуясь жестокостью Сталина беспощадно клеветали на честных людей и умывались их слезами. Именно такие, как Сайфи Кудашев, Мустай Каримов, Кирей Марган, Бакир Усманов и Ахняф Харисовы в 1946 году 26 августа представили в ЦК КПСС доклад о репертуарном плане драмтеатров. В этом докладе они взяли на замечание мою драму «Идукэй и Мурадым» и в этой связи пытались меня оклеветать и обвинять в чем то. И действительно в 1950 году по их инициативе, по приговору особого совещания я был осужден на 10 лет и был выслан в лагерь. Освободился после смерти Сталина, в 1956 году. По приезде из места заключения в Уфу, где я и жил, обратился с заявлением о реабилитации к прокурору Баш. АССР. Тогда он по телефону обратился к выше упомянутому председателю правления Союза писателей Башкирии Мустаю Каримову. После этого разговора, через три дня прокурор республики мне заявил, что «не нахожу основания реабилитировать Вас». Тогда я был вынужден обратиться к прокурору РСФСР, он также в моей просьбе отказал. Тогда я был вынужден обратиться к Вам, Никита Сергеевич, по Вашему указанию Генеральный прокурор СССР по моему делу сделал протест и по этому протесту Верховный Суд Баш. АССР 30 октября 1959 года меня реабилитировал полностью»...* (Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының ғилми архивы, ф. 25, оп. 1, ед. хр. 58).

---

[2] Көнгә ҡарап үҙ төҫөн алмаштырған хамелеон кеүек, заманаға яраҡлашып, «милләтселек» тигән боронғо терминын шулай алмаштыра.

Халыҡ сәсәне бөйөк Мөхәммәтша Буранғолов яҡты донъянан киткәндән һуң бушанып ҡалған “ҡоторонҡо милләтсе” урынына яңы «һөрһөп бөткән»дәрҙе эҙләп табыу (табылмаһалар, яһау!) һәм баяғы сәйәсәттәге мөҡәддәс көрәшен дауам итеп, бөйөк ҡыҙыл империяның ҙур сәйәсәт үрҙәренә өҙлөкһөҙ күтәрелеү сәме тынғы бирмәй ине, ахырыһы, сәйәсмәнлек нәфсеһе ныҡ ҡуҙғалған һәм ҡыҙышҡан халыҡ шағирына. Шуға күрәлер ҙә ул, Мәскәүҙең һәм урындағы партократияның аҫтыртын милли сәйәсәте хорына ҡушылып бар көсөнә йырлау өсөн, башҡорт халҡының тарихын эстән емертергә тотона — үткәнен юҡҡа сығара, ә юҡҡа сығарып булмаҫтайын тырышып түбәнһетә — Бөйөк Октябрь революцияһынаса башҡорттоң бер нимәһе лә булмаған, ә үҙе ҡырағай булған, тигән «дөйөм йыр»ға ауаздашланып көсәнә...

Тарихыбыҙға бәйле ошондай сәйәси тартыштар осоронда, әлбиттә, халыҡҡа башҡорттоң йәшертелгән ысын тарихын ҡайтарып бирергә тырышҡанда боронғо сығанаҡтар, географик карталар кире ҡаҡҡыһыҙ таяныс булып торҙо, ләкин баяғы политикандар уларҙы барыбер күрмәҫкә, күрһәләр ҙә, телгә алмаҫҡа, алһалар ҙа, төрлө уйҙырмалар ярҙамында бутарға, юҡҡа сығарырға көсәнде. Ундайҙарҙы иң йөҙәткәне – бик боронғо географик карталар ине, сөнки сығанаҡтарҙағы яҙмаларҙы төрлөсә аңлатып яңылыштырырға була, ә карталар менән алдашыуы ҡыйын, сөнки географик объекттар һәм уларҙың атамалары күргәҙмәле рәүештә күҙгә төртә.

## Папирус битендәге башҡорт изге тауҙары картаһы

Бабаларҙың ҡая таштарға төшөрөлгән карталары тураһында күп яҙылды, ә бында йомшаҡ матдәләрҙәге үҙебеҙгә ҡағылышлы бер килке карталарҙы байҡайыҡ.

Беҙҙең эраға тиклем 2778 йылдан алып 730 йылғаса төрлө осорҙарҙа Боронғо Египет тәхетендә иң кәмендә 6 (алты) башҡорт фирғәүен булып ултырғанын яҙғайныҡ. Шулар араһынан тарихта иң күренеклеһе Үҫәргән йәки Саргон батша булыр. Б.э.тиклем XXIV быуатта ул бөтә Шумерҙы яулап ала һәм Египетҡаса барып етә, үҫәргәндәр ундағы халыҡтарҙың рухи-дини тормошонда ла шаҡтай эҙ ҡалдыра. Улар илткән тәүдинебеҙгә бәйле ҡомартҡы – б.э. тиклем 1300 йылда папирусҡа һүрәтләнгән изге 1.Ҡуш-тау, 2.Шәке-тау, улар янынан ағылыусы 3.Ағиҙел йылғабыҙ картаһы:




Ни өсөн Тора-тау һәм Йөрәк-тау күрһәтелмәгән, тигән һорауға яуап *тәүдин* ҡанундарынан аңлашыла: Тора-тау – бөтә дүрт юлдыҡылар өсөн дә уртаҡ, бөтә хоҙайҙарҙы ла тыуҙырған изге тау; Ҡуш-тауҙың төньяҡ убаһы менән Йөрәк-тау – Тышҡы Башҡорт (бәжәнәк-башҡорт) ҡәүемдәренеке; Ҡуш-тауҙың көньяҡ убаһы менән Шәке-тау – Эске Башҡорт (үҫәргән-башҡорт) ҡәүемдәренең изге тауы. Һуңғыһы ғына айырып күрһәтелгәнлектән, тимәк, был картаны Боронғо Египеттың үҫәргән башҡорто яһаған. Бик боронғо замандарҙан уҡ башҡорттоң *дүрт юл* ҡәүемдәре Ағиҙел һыу юлынан буйлап килеп, картала күрһәтелгән ҡоро юлдан ошо изге тауҙарға барып табынғандар. Өҫтәп иҫкә төшөрәйек: мифтарыбыҙҙа Ҡуш-тау – ***Дәү Хоҙайыбыҙ Имирҙың*** ҡуш имсәге һаналған (Шәке-тау – имсәк башы) һәм уның тәүге исеме лә ***Имәй*** (карталарҙа Имай, Умай) булған; иң боронғо карталарҙа ошо исем (Умай) хәҙерге Урал тауҙарына ҡушылған. 1375 йылда нәшер ителгән Каталон картаһында Ағиҙел йылғабыҙ тап Ҡуш-тауыбыҙҙан башлана – унда асыҡ итеп Ҡуш-тау һүрәтләнгән:



## Птолемей картаһында Эске (Көнбайыш) Урал һәм Тышҡы (Көнсығыш) Урал

Птолемейҙың (б.э. II быуатында йәшәгән) “География”һындағы донъя карталарын 1540 йылда Себастьян Мюнстер ташҡа баҫтырып сығарған. Унда

Рис. 24а. TABVLA ASIAE VIII. Скифия, Серы, Индия. Первая часть




Төньяҡ боҙло океандан – Каспий диңгеҙенәсә буйлаған, Урал тауҙарының ике яғына һуҙылған Скиф-өйө (Скифия) тигән ифрат ҙур ил бар – һуңынан ул тарихи Башҡортостан тип йөрөтөлә. Боронғо географтарға ныҡ билдәле был “скиф” атамаһы боронғо башҡортса ***“әсә-көб”*** тигәндән хасил, йәғни *“әсә-бүре”*; боронғо телебеҙҙә бүре-эт тоҡомо *“көб” (көбәс – бүре-әсә; көбәт, ҡеүәт – бүре-ата йәки эт; көбәк – бүре-әкә/аға, йәғни йәш ата эт)* тип исемләнгән. Әсә-Бүре Үҫәргән башҡорттарының башбабаһы *Шүлгән-матурҙың* имсәк әсәһе һаналған һәм изгеләштерелгән, шуға күрә Көнбайыш Урал (Эске Башҡорт) ерҙәрендә йәшәүсе һәм Әсә-Бүрегә табыныусы башҡорттарҙы “скиф” тип атағандар һәм был атама Көнсығыш Урал (Тышҡы Башҡорт) ерҙәрендә йәшәгән һәм башбабаһы *Урал-батырҙың* имсәк инәһе Бизон-Һыйырға йәки Болан-Һыйырға табынған Бәжәнәк башҡорттарына ла йәбештерелә. Шулай итеп, Скифия – башҡорт тоҡомоноң бер туған ике фратрияһының – үҫәргән-башҡорт менән бәжәнәк-башҡорттоң йәшәү урыны, хаҡ-аҫаба ерҙәре. Птолемей картаһында ул яҡшы төҫмөрләнә: Имай-Урал тауҙары, Эске Башҡорт һәм Тышҡы Башҡорт, “ат ите ашаусылар – башҡорттар, Урал көнсығышында Абҙаҡ, Әсәтән ҡалалары...




Рис. 23а. TABVLA ASIAE VII. Скифия, Согдиана, Персия, Индия. Первая часть

Шул картаның икенсе өлөшөндә күрәбеҙ: Яйыҡ, Иҙел, Кама, Ағиҙел; Өфө йылғалары, Иҙел тамағында уң яҡлап Сармат-Юрматы башҡорттары; Ағиҙел менән Өфө йылғалары ҡушылған сата-аралыҡта (тап хәҙерге Өфө торған ерҙә) – Rh-Obo-sti йәғни ***Агиҙел-Өфө-саты*** тигән мәркәз исеме – тап ошо ***Өфө*** башҡалабыҙ! Бабаларыбыҙҙың был дини-мәҙәни үҙәгенә яттар аяҡ баҫа алмаған (юлда уҡ үлтерелгән), уның хаҡында сит илдәрҙең кешеләре ишетеп кенә белгәндәр, шуға күрә картала Өфө-ҡалабыҙ ҡәҙимгесә бина һүрәте рәүешендә билдәләнмәгән. Әммә, асыҡ күренеүенсә, Өфө ҡалаһы Птолемейға билдәле булған. Шуға күрә хәҙерге һаҡсыл тарихсыбыҙ Н.А.Мәжитовтың датаһы -- Өфө ҡалаһының йәшәй башлауын б.э. V быуаты менән билдәләүе хәҡиҡәткә тап килмәй.

Инде Иҙелдең урта үҙән картаһына күсәйек.




Рис. 18d. TABVLA ASIAE II. Сарматия Азиатская. Четвертая часть

Унда Свияга һәм Терешка йылғалары аралығында башҡорт ир-ҡыҙҙарының – Амазонкаларҙың иле күрһәтелгән. Терешканың уң яғында йәнә башҡорттоң Арбалы-Ҡаңғы иле.

Әйткәндәй, Өфө ҡалаһының исеме ***Ур-Өфө-өй*** – ***Рифей*** рәүешендә б.э. тиклем үк гректарға киң билдәле булған, Птолеией ***Имай*** (Эмей, Имсәк – Ҡуш-тауҙың боронғо исеме) тип белгән Урал тауҙарын да гректар ***Рифей*** тип йөрөткән.

## Мөхәиммәт әл-Идриси картаһы (1154)

Билдәле булыуынса, һәр хәлдә минең тикшереүҙәр һөҙөмтәһенсә, Өфө ҡалаһы б.э. тиклемге бик боронғо замандарҙан уҡ Евразия ҡитғаһының дин һәм мәҙәниәт мәркәзе рәүешендә донъяға билдәле булған һәм, хәҙер инде төрлө илдәрҙең иң алдынғы ғалимдары таныуынса, хәҙерге һәм тарихи Башҡортостан сиктәрендәге Урал – *кешелек донъяһының бишеге* булған. Фәнни яҡтан өҙлөкһөҙ дөрөҫләнә килгән ошо фактты танымау, юҡҡа сығарыу өсөн баяғы ғилми-әҙәби яһилдар тарафынан, башҡортсалап әйткәндә, төрлө этлектәр эшләнә. Күҙгә төртөп торған матди асышты -- Өфө-II тип йөрөтөлгән боронғо Өфө ҡалаһының ҡаҙылма ҡомарткыларын инҡар итеүҙәр, моғайын, маңҡортлоҡтан арына башлаған тарихсыларыбыҙҙың да үҙ эшендә һүлпәнлеге, ҡыйыуһыҙлығы арҡаһындалыр, б.э. тиклем үк киң билдәле мәркәздең йәшәү осорон б.э. V быуатынан ғына башлау факты шуны күрһәтә. Ләкин Н.А.Мәжитовты ошо үтә һаҡсыллығы ла уны яһилдарҙан ҡотҡармай – һәр яҡлап ябырылалар. Александр Антонов тигән берәү, мәҫәлән, бына нимәләр яҙа:

“В книге, написанной Н.А.Мажитовым совместно с А.Н.Султановой, авторам уже не понадобилось отождествлять правый приток Итиля с рекой Уфой: «На карте (Идриси. — И.А.) страна башкир размещена в верховьях реки, впадающей в Каспийское море». Верховьями этой реки, как известно, считалась «Агидель (Белая) со своими притоками», вытекающими с Уральских гор, которые на карте «выведены под названием Айани». Но если река, на которой жили башкиры, вытекала из гор Айани, то это не Белая, а Верхняя Кама, где и помещены башкиры на карте Идриси. Конечно, нельзя считать, что башкиры и в самом деле жили не на Белой, а на Каме. Ведь и сам Идриси в седьмой секции пятого климата размещает башкир в верховьях Итиля, т. е. на р. Белой. Но этим данным противоречат данные седьмой секции седьмого климата, которые отражены на карте. Стало быть, Идриси дает две версии локализации башкир — на Белой и на Верхней Каме. Нет необходимости доказывать, что первая версия правильна, а вторая — нет (минеңсә, икеһе лә дөп-дөрөҫ – тарихи Башҡортостан ерҙәре. Й.С.). Значит, локализацию башкир в седьмой секции седьмого климата сочинения Идриси и на его карте надо признать ошибочной, а попытки Н.А.Мажитова доказать, что на карте Идриси башкиры размещены правильно, — неубедительными”.

Күренеүенсә, бында әл-Идриси картаһында билдәләнгән башҡорттарҙың йәшәү урынын *яңылыштырыу* маҡсатында картаның үҙе түгел, ә боронғо автор тарафынан төрлө быуаттың төрлө сығанаҡтарынан йыйылған һәм күбеһе хаталыҡлы тасуирнамәләр беренсе урынға ҡуйыла һәм быға А.Н.Мәжитов тоҫмалының теүәллекле эшләп еткерелмәүе ярҙам итә. Башҡорттарҙы тап ошолай ерлектәренән тайҙыртып кесерәйтеү, ҡырағайлаштырыу, кәмһетеү алымы тарихсы И.Г.Коновалованың Рәсәй фәндәр академияһы Рәсәй тарихы институты раҫлаған “Восточная Европа в сочинениях ал-Идриси” тигән китабында (1999) һис бер йәшермәйенсә ҡулланыла:

“*Басджирты*. Сведения, приводимые ал-Идриси о басджиртах (башкирах), также отчасти повторяют данные более ранних писателей. Новая информация касается городов басджиртов: "Из городов внутренних басджиртов [назовем] Мастр и Кастр. Оба города невелики, и купцы редко посещают их. И никто в них не бывал, так как [туземцы] убивают всех чужестранцев, которые хотят проехать через их страну (дөрөҫө -- ҡитғаның изге дини үҙәге Өфө ҡалаһына яттарҙы үтәкрмәйҙәр. -- Й.С.). Оба города стоят на реке, впадающей в Исил".

По всей вероятности, -- продолжает историк, --эти данные ал-Идриси получил из вторых рук: информатор географа сам вряд ли бывал в городах басджиртов и знал лишь их названия, а также имел представление о труднодоступности этих городов для купцов. Наличие целого ряда вариантов чтения названий городов (Мас.т.р, Маст.р, Мамир, Мас.рада; Кас.т.р, Камир, Кас.р) также говорит о недостаточной конкретности полученных ал-Идриси сведений о городах басджиртов.

Основными занятиями башкир в XII в. являлись кочевое и полукочевое скотоводство, охота, в том числе пушной промысел, бортничество. Никаких городов в XII в. у башкир не было (тарихсыға һис килешмәҫлек күрәләтә алдап кәмһетеү! – Й.С.). Даже в XIII в. путешественник Вильгельм Рубрук отмечал полное отсутствие каких-либо поселений в стране башкир (сөнки Рубрук та Эске Башҡорт үҙәгенә үтеп керә алмаған. --.Й.С.). Данные ал-Идриси о наличии городов у басджиртов могут отражать дошедшие до его информатора сведения о башкирских родо-племенных названиях -- кесе и мишар” (сетерекле хәлдән еңел ҡотолоу! – Й.С.).



Рис. 1. Поволжье по карте бр. Пицигани 1367 г.

Ҙур күләмле хеҙмәтенең төрлө биттәрендә башҡорт ер-һыуҙарын, тауҙарын исемләп тикшергәндә лә был тарихсы ундағы *башҡорт* атамаһы морон төртөрҙәй урындарҙы уратып үтә, фәҡәт өҫтә килтерелгән кәмһетеүле өҙөктә генә үҙ алымынан һөрлөгөргә мәжбүр. Ғөмүмән, башҡорт халҡын һәм тарихын иҫәпкә алмау урыҫ тикшереүселәренең күпселегенә йоҡҡан яман сир һәм улар был йоғошлонан һис тә арынырға йыйынмай. Сәбәбе үҙебеҙҙән дә – тарихты сәйәсәткә хеҙмәт иттерткән остаздарыбыҙ аша атларға ярамай тип ҡанға һеңдерелгән идеологик кәртәләрҙе йырып сыға алмайбыҙ. Әйтәйек, Н.А.Мәжитов китабының хатта 2010 йылғы яңы баҫмаһында ла әл-Идриси картаһына (1154) иғтибар ителмәгән (Птолемей хаҡында әйтәһе лә түгел!) һәм, үкенескә ҡаршы, урта быуат картографтарына ла яҙа таянылған: “...на карте западноевропейских авторов XIV-XVI вв. братьев Пицигано (1367 г.) и Г.Меркатора (1554 г.) город Паскерти (Башкорт) помещен в среднем течении р. Белой, примерно, на уровне современной Уфы. На Южном Урале городище Уфа-II самый крупный памятник, поэтому логично предположить, что под городом Башкорт вышеназванные авторы подразумевали комплекс памятников (городища, некрополь, селища) с городищем Уфа-II в центре.

Утверждение за городищем Уфа-II названия «город Башкорт» легко объяснимо: оно возникло от самоназвания народа башкорт -- коренного населения

Южного Урала. Эта - распространенная традиция, когда этнонимы присваиваются городам".

Һуңғы һөйләм дөрөҫ, әлбиттә, ләкин Пицигано билдәләгән Башҡорт ҡалаһы Н.А.Мәжитов инанып раҫлаған урында түгел шул, ә Ағиҙел тамағына (Кама йылғаһына) яҡыныраҡ ***һул ярҙа.*** *Ләкин* Паскатир йәки Мәрмәр (хәҙерге Эстәрлетамаҡ) үҙ урынында тора (картала аҫтарына һыҙылған).




Меркаторға килгәндә, уның 1641 йыл нәшер ителгән картаһында, Өфө йылғаһы күрһәтелмәһә лә, Уфиу (Өфө) ҡалаһы үҙ урынында – Ағиҙелдең уң ярында ғәмәлдә Өфө йылғаһының тамағында урынлаштырылған; ул осорҙа Башҡортостан ҡурсаулыҡтарының сиктәре асылғанлыҡтан, Өфө ҡалаһы үҙ исемендә яҙылған, ә элегерәкке -- 1633 йылғы нәшер картаһында Өфө йылғаһы ла күрһәтелеп, тап хәҙерге урынындағы Өфө-ҡалабыҙ шул әүәлгесә Паскерти тип аталғайны. Һәр хәлдә, Ағиҙел-Өфө йылғалар сатындағы Паскертиҙы Өфө ҡалаһы тип раҫлаусы башҡорт ғалимдары Й.М.Йосопов, Н.А.Мәжитов, А.В. Бесәншин уҙамандар хаҡлы. Шул уҡ ваҡытта Н.А.Мәжитовтың, артыҡ һаҡсыллыҡ (әллә ҡурҡаҡлыҡ?!) күрһәтеп, Птолемей һәм Мөхәммәт әл-Идрисиҙы уратып үтеүе башҡорттарҙың һәм Өфө ҡалаһының тарихын бутаусы һәм ҡыҫҡартыусыларҙың тирмәненә һыу ҡоя. Бына әл-Идриси картаһындағы Эске Башҡорт күренеше:



Кәм тигәндә 16 (ун алты) башҡорт ҡалаһы билдәләнгән һәм иң эре өсөһөнөң исеме асыҡ уҡыла: ***Маср,*** (хәҙерге Татарстан Республикаһындағы Сермән), ***Ҡаср,*** (хәҙерге Өфө), ***Ҡараҡия*** (хәҙерге Ырымбур өлкәһе Биләй районында Яйыҡтың уң ярындағы Ҡыҙылташ/Красногор ҡалаһы, был заманда ҡасаба). Быларҙың тәүгеһе – Пицигано картаһындағы, икенсеһе 1633 йылғы Меркаторҙыҡындағы Паскерти (Башҡорт). Ни өсөн былай: Өфө-ҡалабыҙ берәүҙәрҙекендә -- Паскерти, икенселәренекендә Ҡаср? тигән һорауға яуап: Паскерти тигәндәре, минеңсә, “Башҡорттарҙыҡы” йәғни башҡорттарҙың баш ҡалаһы, тигән киңәйтелгән билдәләмә, сөнки Өфөнөң ысын исемен яттарға әйтмәгәндәр. Шуға күрә әл-Идриси исемдәрен әйтеү тыйылған ике ҡалабыҙҙы үҙ телендә атаған: Маср – ғәрәпсә “серле, йәшерен”, Каср – “батша һарайы, бейек һәм матур итеп һалынған бина”, ысынлап та, ҡитғаның дини-мәҙәни мәркәзе Өфөгә тап килә. Эстәрлетамаҡ ҡалабыҙҙың боронғо ике исеме барлығын әйткәйнем, икеһе лә башҡортса: “мәре” (урыҫтағы “море”) һүҙенең әлегәсә телебеҙҙә “һыу” (“мар” тиһәк, ғәрәпсә “йылан” булыр ине) мәғәнәһендә йөрөүен иҫләһәк, Мәр-Мәр – “һыу-һыу” тимәк, ике йылға (Эстәрле, Ашҡаҙар) тамағындағы ҡала. Икенсе исеме Паскатир – Басаҡ/Бажаҡ/Бөжәк/Балаҡ (Әсә-Бүре/Волк, Волчица) һәм Тор/Тора/Түрә (Хоҙай) һүҙҙәренең ҡушмаһы, тимәк, Әсә-Бүре-Хоҙай ҡалаһы. Шул Паскатирҙан, баштағы “п” өнө юйылып, Аскатир/Ашҡаҙар йылға исеме тороп ҡалған. Билдәле сәйәхәтсе Плано Карпини Алтын Урҙаның баш ҡалаһы Ҡара-Ҡоромға барырға 1245 йылда юлланып, сәйәхәтендә шул Паскатир (Эстәрлетамаҡ) ҡалаһы аша уҙған, ул баш ҡала бынан алыҫ түгел Урал артындағы Ҡара-ҡан/Ҡараған (Ҡара-һыу) һәм Үтәгән (монголдар Утикен тип яҙа) йылғалары сатында бик боронғо ҡалабыҙ Арҡайым тәңгәлендә ҡоролоп, Ҡара йылға буйындағы ҡала-ҡором, йәки боронғо ҡала мәғәнәһендә ***Ҡара-Ҡором*** тип аталған.

Идрисиҙың карталарына бирелгән аңлатмаларында башҡорттар тураһында ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр бар:

«В упомянутую Русскую реку (Волга-Иҙелгә. – Й.С.) впадают шесть больших рек, берущих начало в горе Кукайа (Күк-кая – Күк Урал. – Й.С.), а это большая гора, протянувшаяся от моря Мрака до края обитаемой земли. Эта гора простирается до страны Йаджуджа и Маджуджа на крайнем востоке и пересекает ее, проходя в южном направлении до темного, черного моря, называемого Смолистым. Это очень высокая гора; никто не может подняться на нее из-за сильного холода и глубокого вечного снега на ее вершине. В долинах этих рек живет народ, известный под именем ан-нибарийа (яңылыш уҡылған *ан-барид* – мәңге һыуыҡ; йәғни *мәңге һыуыҡ яҡ халҡы*, башҡорттар. – Й.С.). У этого народа есть шесть укрепленных городов, расположенных между руслами этих рек, текущих, как мы уже сказали, с горы Кукайа. Никто не может покорить этих людей: у них принято не расставаться с оружием ни на миг, они чрезвычайно осторожны и осмотрительны». Башҡа сығанаҡтарҙа ла башҡорттарға бәйле ошондай уҡ сифаттар килтерелгән.

## Боронғо башҡорт картаһы



һүр.1. Карта ү□е

Мәхмүд Ҡашғариҙың “Диуану лүғәт әт-түрк” (1072-1074 йылдарҙа яҙылған) әҫәренең ҡулъяҙма күсермәһенә теркәлгән боронғо географик карта был (хәҙерге Төркиәлә һаҡлана). Һәм ул 1076 йылда эшләнгән “әл-Ҡасдари донъя картаһы” булараҡ та билдәле. Әммә әл-Ҡасдариҙың кем (булғанмы-булмағанмы) икәнлеге мәсьәлә булып ҡала, шул уҡ ваҡытта был картаның Мәхмүд Ҡашғари хеҙмәтенән дә боронғораҡ икәнлеге мәғлүм, сөнки Мәхмүт Ҡашғариҙағы байтаҡ географик атамалар унда күренмәй. Хәҙерге заман ҡаҙаҡ, үзбәк, уйғыр, курд һәм хатта япон авторҙары ошо картаны яһаусыларҙы үҙ бабалары итеп раҫларға тырыша имеш, ләкин был мәғәнәһеҙ, сөнки ундағы мәғлүмәттәр беҙҙең боронғо ғәрәпсә менән сыбарланған төрки әҙәби телендә яҙылып, үҙәк һүрәтләү объекты итеп Урал тауҙары менән ҡуша киң майҙанлы тарихи Башҡортостан һәм уның тирә-яғы алынған, шулай уҡ һүрәтләү саралары ла заманының төп идеологияһына – донъя-ғаләм тураһындағы башҡорт мифологияһына туранан-тура нигеҙләнгән; шуға күрә был ҡомартҡыны ғәмәлдә башҡорт кешеһе эшләгәндер йәки эшләттергәндер тип тоҫмалларға һәм уны башҡорт халҡының мираҫы тип билдәләргә сәбәп бар: иң ҙур дәлилдәрҙең береһе – донъяның дүрт тарафының картала, европеоид картографтарҙыҡынан ҡырҡа айырмалы булараҡ, донъя-ғаләм ҡоролошона һәм уның яҡтарына тап башҡорт мифологияһына яраҡлаштырылып урынлаштырылыуы:

**Уңда** – төньяҡ (боронғо башҡортса: **туң яҡ** йәғни һыуыҡ яҡ; һыуыҡлыҡты белдереүсе “туң” һүҙенән йүнәлеште билдәләүсе **“уң”** һүҙе яһалған, шуға күрә ер йөҙөн һүрәтләү дәүерендә карталағы төньяҡ уң яҡҡа ҡуйылған.

**Һулда** – көньяҡ (боронғо башҡортса: **һүл (һыу) яҡ** йәғни һыу-һүл туңмай торған йылы яҡ; “һүл” һүҙенән йүнәлеште белдереүсе **“һул”** һүҙе яһалған, шуға күрә карталағы һүл яҡ (көньяҡ) һул яҡҡа ҡуйылған.

**Өҫтә** -- көнсығыш: Көн-Ҡояш иртән өҫкә сыға (ҡалҡа) торған яҡ -- **өҫ яҡ** һаналған, шуға күрә карталағы көнсығыш өҫкә ҡуйылған.

**Аҫта** – көнбайыш: Көн-Ҡояш кисен аҫка төшә (байый) торған яҡ – **аҫ яҡ** һаналған, шуға күрә карталағы көнбайыш аҫка ҡуйылған.

Донъя тарафтары күрһәткесенең башҡорт телендәге икенсе төрө лә бар, уның терминдары аҙаҡ урыҫ теленә йәтешләнеп кергән:

**Көнсығыш:** Әбәс-атаҡ (баш-атай – мифик Ер-атаның Көн һәм Айҙы “тыуҙыра” йәки сығара торған енси ағзаһы, фаллос)<бәсатаҡ<**восток.**

**Көнбайыш:** Ә**сә-бат**аҡ (батаҡ – Һауа-әсәнең енси ағзаһы йәней)<(ә)**сәбат**(аҡ)<**запад.**

Картаның ошолай башҡортса йүнәлешләндерелеүен күптәр (Уралыбыҙҙа шыткан тәүтел, тәүдин һәм тәүмифология белемдәренән мәхрүмдәр) аңлай алмай бутала, яңылышлыҡтар тыуҙыра. Әйткәндәй, был картаны тәүбашлап етди тикшереүсе Иван Иванович Умняковҡа ла (И. Умняков. Самая старая турецкая карта мира. – Труды Самаркандского гос. пединститута, I, вып. 1, Самарканд, 1940)

хас ошо етешһеҙлек артабан башҡаларҙы -- ул авторға таянып эш итеүсе бер-нисә быуын авторҙарын да бутай һәм күптән был мәсьәләгә яңыса ҡараш талап ителәә.



Һүр.2. Ер йөҙөнөң бынан 25000 йыл элек торошон Һүрәтләгән иң боронғо донъя географик атластарының береһе: 1. Австралия, 2. Алыҫ Көнсығыш, 3. Ғәрәп ярымутрауы, 4. Һинд субконтиненты, 5. Африка, 6. Пиринеи (ул саҡта утрау), 7. Гренландия, 8. Төньяҡ Америка, 9. Көньяҡ Америка – Ҡыҙылҡомдағы Бүкәнтау ҡаяһында. – Этнография и археология Средней Азии, изд. "Наука", М. – 1979, 141-енсе бит.

Уны, ғәҙәттә, төркиҙәрҙең ***иң боронғо*** географик картаһы, тип атап йөрөтәләр, ләкин һис кенә лә "иң боронғо" түгеллеген хайран ҡалдыртҡыс дәлилләүсе ғәзиз ҡомартҡыларыбыҙ – ҡая таштарға сыйылған һәм Ер шарының барлыҡ ҡитғалар географияһын бынан егерме биш мең (25000) йыл элегерәкке хәлендә шаҡ-ҡатырғыс теүәллектә тасуирлаған донъя атластарыбыҙ ҙа бар ("Ватандаш" журналының 1997 йыл 2-3 һандарында: Зигат Султанов. Корни), ундағы донъя тарафтары ла хәҙерге беҙҙәр географик карталарҙа күреп өйрәнгәнсә түгел (һүр.2): мәҫәлән, хәҙерге беҙҙеңсә ҡарағанда, Австралия (1) – төньяҡ-көнбайышта, Алыҫ Көнсығыш (2) – көньяҡ-көнбайышта, Гренландия (7) – көньяҡта, Америка ҡитғалары (9) – көнсығышта урынлаштырылған, ә улар киреһенсә булырға тейеш ине...

Башҡорт-урыҫ (уртаҡ) календарындағы ете тәүлеклек аҙна көндәренең исемдәре лә баяғы картаның асылын тыуҙырышҡан рухиятҡа – башҡорт мифологияһындағы донъя-ғаләм ҡоролошо тураһындағы төп мифҡа тығыҙ бәйле. Күпселек уҡыусы уны белмәгәнен иҫәпкә алып, артабанғы фекер ағылышы аңлайышлы булһын өсөн, ҡыҫҡаса ғына биргәндә, бабаларҙың мифик тәғлимәтендә донъя-ғаләм ҡоролошо ошондай:




Һүр.3. Тәүмифологияла донъя-ғаләм ҡоролошо: Өҫкө Донъя һәм Әсә Балыҡлы өҫкө һыу; Урта Донъя (тәгәрмәсҡала Арҡайымлы); Аҫкы Донъя һәм Ата Балыҡлы аҫкы һыу. Һандар менән күрһәтелә: 1. Уралйәндең тыуыуы (воскресение), 2. Уралйәндең аҫкы һыу аша үтеүе (суббота), 3.Урпалйәндең өҫкө сүл (сүр) аша үтеүе (среда), 4. Уралйәндең Өҫкө Донъяға килеүе (понедельник), 5. Уралйәндең иң өҫкә өйөлөүе -- өйлә (полдень), 6. Уралйәндең Шүлгәнгә әүерелеүе һәм Аҫкы Донъяға батыуы – байыуы (вторник), 7. Шүлгәндең өҫкө сүл (сүр) аша үтеүе (среда), 8. Шүлгәндең аҫкы һыу аша үтеүе (четверг), 9. Шүлгәндең Аҫкы Донъяға кереүе – (пятница), 10. Шүлгәндең иң аҫка төшөүе – төш (полночь). Урыҫса көн (ай) атамалары

Иң элек иҫкәртәйек: бабаларҙың донъя-ғаләм-тереклек мифы буйынса, Үҫәргән (Эске Башҡорт) кешеләренең башбабаһы Шүлгәнде -- Әсә-Бүре/Бүре-Әсә ҡиәфәтенә кергән Көн-апа/Ҡәнифә (Ҡояш), ә Башҡорт (Тышҡы Башҡорт) кешеләренең башбабаһы Уралды Бизон (Боҙ-инә/Буҙан-һыйыр/Болан) ҡиәфәтенә кергән Ай/Айбикә имеҙеп үҫтергән; шуға күрә үҫәргәндәр – бүреләр (абарҙар), башҡорттар – боҙинәктәр (бәжәнәктәр/печенегтар) тип йөрөтөлгән. Үҫәргән ырыуында әлегәсә *бүреләр* араһы бар.

Өҫтә күрһәтелгән беренсе осор тәүмиф моделендә (1) Әр-ата (Ир-ата йәки Ер-ата -- фаллос) бәргән (йәки биргән) Әр-ал-ян (ир -- ал төҫтәге янғын-ут) йәки **Уралйән** мәңгелек орбита буйынса Өҫкө донъяға ҡалҡынып, унда яҡтылыҡ-ут сәсә

(Көн бурысын үтәй) ҙә Аҫҡы Донъяға батҡанында (6) Әс-ал-ҡанға (әсә -- ал төҫтәге ҡанға) әүерелеп йәғни (Ә)**<u>салҡан</u>**<сүлҡан<**Шүлгән** булып Аҫҡы Донъяға төшә лә унда ҡараңғылыҡ-һыу һала. Тимәк, төп мифтың беренсе осор моделендә бер үк исем Өҫкө Донъяла (“ер өҫтөндә”) – Көн (Ҡояш), ә Аҫҡы Донъяла Ай булып йөрөй йәғни икегә төрләнә, тип һаналған.

Төп мифтың икенсе осор моделендә был әүерелмән исем Ай-Көн үҙаллы икегә бүленеп, кеше ҡиәфәтле Уралға һәм Шүлгәнгә әүерелә (Өҫкө Донъяла – Урал, Аҫҡы Донъяла Шүлгән булып һынлана). “Урал батыр” эпосында улар, игеҙәктәр, кеше ҡиәфәтле Йәнбирҙе-атаның һәм Йәнбаға (йәки Йәнбикә)-әсәнең кеше ҡиәфәтле яртылаш үлемесле (йәғни бәндәүи кәүҙәһе үлемесле, илаһи башы үлемһеҙ) игеҙәктәре **Урал** (ир-ат енесле) һәм **Шүлгән** (ҡатын-ҡыҙ енесле) рәүешендә һынлана ла икеһе бер йүнәлештә (Көн һәм Ай юлынан) аллы-артлы тағылышып Ер шарын мәңге “әйләнеп йөрөй”. Йәғни уларҙың бәндәүи кәүҙәһе ер йөҙөндә кеше ҡиәфәтендә, илаһи башы күк йөҙөндә Көн (Ҡояш) ҡиәфәтендә хәрәкәтләнгән. Көнө еткәс улар икеһе лә яртылаш үлеп, **Шүлгәндең** үлемесле кәүҙәһе – **Шүлгән-тауға** (хәҙерге Силәбе өлкәһендә), ә үлемесһеҙ башы утлы **Көнгә** (Ҡояшҡа) әүерелә; **Уралдың** үлемесле кәүҙәһе – **Урал-тауға**, ә үлемесһеҙ башы “һыулы-боҙло” **Айға** әйләнә. Был башбабаларҙың өҫтәрәк күрһәтелгән **Әсәл-ҡан (Әсәл-хан)** һәм **Урал-жан (Урал-ян)** тигән тәүисемдәренә килгәндә, ундай исемдәр ҡушыу йолаһы әҙәмдәргә лә күскән: урта быуаттарҙа Уралдан Шәйбәни-хан ғәскәрҙәрендә Урта Азияға киткән башҡорт **аҫаба-үзбәктәр** (асабаҡ>азабаҡ>**үзбәк** – Урта Азия аҫабалары) әлегәсә мотлаҡ рәүештә ҡатын-ҡыҙ исемдәренә -- *хан*, ир-аттыҡына – *жан* ҡушымталарын теркәй (Мәйсәрәхан, Ғарипжан); Урал аҫабаларында ла был йола берталай һаҡлана (Ғарифйән, Ғәйшәханым).

Донъя-ғаләм моделе, өҫтәге һүрәттән күреүебеҙсә, өс ҡатламдан ғибәрәт, имеш:

**1. Өҫкө Донъя (Күк көмбәҙе -- Әсә-һауа)** йәғни Әсә-аба (Аҫаба)<сәба<**һауа** – хоҙайҙарҙың Асманға ашҡан изге йәндәре (ғаләмдәр, йондоҙҙар, планеталар рәүешендә) йәшәй торған урын һәм Урта Донъялағы бәндәләрҙең мәйеттәре яндырылып көлө Күккә осоролғас йәндәре унда ҡабат тәнләнеп, ҡара күмер төҫөндәге кеше ҡиәфәтенә кереп кәүҙәләнгән өҫкө ер йөҙө -- **Африка** ҡитғаһы. Илаһиҙарға килгәндә, Күк һүлендә (Һинд океанында) йәшәй, имеш, ер йөҙөн үҙ арҡаһында тотоп торған Өҫкө Донъя Тотаны (титаны) **Әсә Балыҡ**; Күктән аҫҡа батҡан (байыған) Көн менән Ай шуның тән-үҙәге аша Ер Кендеге Арҡайымға уҙа, тип һанағандар. Көн һәм Ай есемдәре Өс Донъяны аша үтеп тулы әйләнешенең ваҡыт берәмеге Өҫкө Донъяла Ә**<u>сә-үтәк</u>**ә<сүтәкә<**сутка** исемләнә.

**2. Урта Донъя (Евразия ҡитғаһы)** – Ер Кендеге Арҡайым һәм Ер Терәге Тора-тау, Ер имсәге Ҡуш-тау һәм ике имсәк башы Шәке-тау менән Йөрәк-тау урынлашҡан, бәндәләр тыуып-үлгәнсе йәшәй торған урын, имеш.

**3. Аҫҡы Донъя (Ер-ата)** йәғни Әрә-ата (арата, әр-ат – ир-ат)<Ир-ата<**<u>Ер</u>** йәғни беҙҙең Урта Донъялағы бәндәләрҙең мәйеттәре ергә күмелгәс (ерләнгәс) аҫҡа төшөп киткән йәндәре унда ҡабат тәнләнеп, ҡыҙыл ҡан (бронза) төҫөндәге кеше ҡиәфәтенә кереп кәүҙәләнгән “аҫҡы ер” – **Америка** ҡитғаһы. Ер һыуында (Төньяҡ Боҙло океанда) йәшәй, имеш, ер йөҙөн үҙ арҡаһында тотоп торған Аҫҡы

Донъя Тотаны (титаны) **Ата Балыҡ**; Ерҙән ҡалҡҡан һәм Әсә-һауаны буйлап үткән **Көн** менән **Ай** шуның аша Ер Кендеге Арҡайымға уҙа, ти. Көн һәм Айҙың Өс Донъяны аша үтеп тулы әйләнешенең ваҡыт бирәмегә аҫта (Аҫҡы Донъяла) А**та-балыҡ**<тауалыҡ<**тәүлек** атала. Тап ошо мифҡа бәйле боронғо географтар ер йөҙөн ике кит балығы арҡаһына ҡуйып һүрәтләгән. Шуға бәйле башҡорт халыҡ мәҡәле бар: "Игелек ҡыл да һыуға һал – халыҡ белер, халыҡ белмәһә -- Балыҡ белер" (Балыҡ-хоҙайҙарға ишара).

Һүрәттә (3) Өҫкө Донъялағы Донъя Ҡуласаһы **Асаба-Астаҡ (Свастика)** ундағы Көн һәм Айҙың, төньяҡ географик киңлектән (экватор һыҙығының төньяғынан) тороп ҡарағанда, сәғәт уҡтары йүнәлешендә әйләнешен, ә Аҫҡы Донъялағы Свастика, киреһенсә, уның, көньяҡ географик киңлектән тороп ҡарағанда, сәғәт уҡтары хәрәкәтенә ҡаршы йүнәлештә әйләнешен күрһәтә.

Донъя-ғаләм моделенән (3-өнсө һүрәттән) күренеүенсә, тәүге берәгәй (Көн һәм Ай икеһе бер һаналған) есем Уралйән-Шүлгәндең орбитала бөтә өс донъя арҡылы тулы әйләнеше ун (10) өлөшкә бүленгән, шуға күрә Урта Донъялағы (Евразия ҡитғаһындағы) бабаларыбыҙҙың 10 (ун) айлыҡ йыл һәм 10 (ун) тәүлеклек аҙна календарҙары булған, ә аҙаҡҡа табан шул унауҙың ете (7) өлөшөн һайлап алып, ете тәүлеклек аҙна календары яһалған ("Үҫәргән-үҫен календары" тигән хеҙмәтемдә ентеклерәк бирелә).

Ете тәүлеклек аҙна календарындағы көндәрҙең исемдәре лә тәүҙә башҡорт теле нигеҙендә яһалып, Көн менән Ай әйләнешендәге уларҙың тәғәйен ваҡыттағы тәғәйен урындарына бәйле атап бирелгән, булып сыға (һүрәттәге һандар буйынса барлағыҙ):

**1. Баскәр-әсәнөйө** (Көн менән Ай "баскәр"ҙән йәғни "баш-ир"ҙән -- фаллостан ҡалҡынып, "әсәнөйө"нә йәғни Әсә-һауаның ауыҙына табан йүнәлә)<баскәрәсәнөйө<**воскресение.**

**2. Суб-үтә** (һыу үтә йәғни Көн менән Ай аҫтағы һыуҙан Балыҡ ауыҙы аша үтә)<субүтә<**суббота.**

**3. Сүр-үтә** (өҫкө сүр/һыу аша үтә)>сүрүтә>**среда.**

**4. Абан-аталанаҡ** (Апа-ана йәғни Әсә-һауа аталана – Аҫҡы Донъя Ер-атаның аталығынан ҡалҡҡан Көн менән Ай Өҫкө Донъя Әсә-һауаның ауыҙына барып/бәреп керә)<(А)**банаталанаҡ**<**понедельник.**

**5. Көн** менән **Ай** иң өҫкә өйөлә -- **өйлә** ваҡыты (**полдень**).

**6. Батыр-анаҡ** (Өҫкө Донъя-анаҡтан Көн менән Ай бата йәғни байый)<батыранаҡ<**вторник.**

**7. Сүр (Сүл)-үтә** (батҡан Көн менән Ай өҫкө һүл-һыуҙан ундағы Балыҡ ауыҙы аша үтә)<сүрүтә<**среда.**

**8. Су-үт-бараҡ** (Көн менән Ай аҫтағы һыуҙы үтеп Ер-атаның ауыҙына табан бара)<суүтбараҡ<**четверг.**

**9. Буй-үтәнсә** (Көн менән Ай Ер-атаның ауыҙынан уның буйына үтә)<буйүтәнсә<**пятница.**

**10. Көн** менән **Ай** иң аҫҡа төшә -- **төш** ваҡыты (**полночь**).

Күренеүенсә, боронғо аҙналыҡ календарҙа воскресение (йәкшәмбе) – беренсе, ә суббота (шәмбе) икенсе көн булып иҫәпләнгән. Был календар иң тәүгеләрҙең береһе һәм теүәлерәге тип ҡаралырға хаҡлы. Бабалар һуңынан

үҫемлек үҫтереү (игенселек) менән шөғөлләнә башлағас, ошо уҡ 10 бүлеккә нигеҙләнгән 10 айлыҡ йыл һәм 10-дың 7-һенә нигеҙләнгән 7 тәүлеклек аҙна менән билдәләнгән, исемдәре лә игенселеккә бәйле Үҫәргән-Үҫен календары ла барлыҡҡа килә.

Схемалағы (1) фаллос атамаһы “баскәр”гә йәғни “баш-ир”гә иғтибар итегеҙ: ир-ат кәүҙәһендәге ике “баш”тың иң мөһиме һаналмыш был ағзаның (фаллостың) аталышы этностыҡына тап килә – баскәр/башкир/башҡорт (шуға табыныусы һәм ишаратын муйынға тағып йөрөүсе башҡортто 922 йылда ғәрәп сәйәхәтсеһе Ибн Фаҙлан күргән)...

Инде карта (еңел аңлайышлы булһын өсөн мин уны, хәҙергесә итеп, 45 градус һулға әйләндереп ҡуйҙым) эстәлегенә күсәйек.




Һүр.4, минең тарафтан номерланған боронғо башҡорт картаһы

Тарихи башҡорт ерҙәре һәм сал-боронғо, үҙебеҙгә ныҡ ҡағылышлы мәркәзебеҙ Өфө ҡалаһы ла (№32, карталағы исеме ҡойроҡло "ж" хәрефе менән "Жржн") күрһәтелгән был ҡиммәтле ҡомартҡылағы бер килке объекттарҙы мин ғәрәп цифрҙары менән нумерлап-аңлатып сыҡтым, бына шуларҙың теҙмәһе:

1. Иҙел йылғаһы (картала исемһеҙ).
2. Жәйхун ("Жихун" – Жаиҡ-ын) – Яйыҡ (Урал) йылғаһы.
3. Рәмил -- Ирәмәл (Урал тауҙарының бер буйы).
4. Рәмил -- Ирәмәл (Урал тауҙарының икенсе буйы).
5. Бесермән – хәҙерге Саратов.
6. Көбстан – Бүрестан (хәҙерге Башҡортостан). Боронғо телебеҙҙә **көб** (йөнтәҫ көплө-тиреле тигән мәғәнәлә; ғәрәпсә лә "ғаба" – йөнтәҫ, йөнтәҫ көп тигән һүҙ) – **бүре**, көбәк – **ата бүре**, көбәсәк – **әсә (инә) бүре**; карталағы **Көбстан** (бүре ыҫтаны, иле тигән һүҙ) – йәмғеһе бер бөтөн тәшкил итеүсе, үҙҙәрен **әсә бүре** һәм **ата бүре** тоҡомдары (үҫәргән-төркиҙәр) итеп һанаусы бер туған ике ырыуҙың дәүләте. Әлегәсә телебеҙҙә ***өй көбәге*** (өй бүреһе – ҡулға эйәләштерелгән бүре йәғни эт мәғәнәһендә) тигән әйтем бар, бәйләнгән эттәй өйҙән сыҡмай ултырған ирҙе шулай тиҙәр. Әле әйтелгән Көбстандың (бүре-эткә табыныусы үҫәргәндәр иленең) кешеләрен дә борон сит тарафтар ***көбәк*** (бүре) тип атаған, шуның "б" өнө "м"-ға үҙгәреп, ***көмәк/кимак*** (шул уҡ үҫәргән) этнонимы һәм ***күмәк*** (множество) һүҙе барлыҡҡа килгән. "Бүре" һүҙенең килеп сығышы ла тап ошо "көб"кә бәйле: көб-әрә (бында "әрә" – ир тигән һүҙ)>(кө)-бәрә>***бүре*** (йәғни ир – ата бүре, ә мифик асылы буйынса ергә төшкән Ай). Ә әсә бүре (волчица) төшөнсәһендәге һүҙҙән килә: көб-әсә>(кө)-бәсә>баса ("босой волк")>***бисә/босой/бесәй*** (мифик асылы буйынса ергә төшкән Көн/Ҡояш). Һәм Көн-әсә (Ҡояш) һүҙе лә бер үк -- өндәр сиратлашыуынан (б-м-н) хасил: көб-әсә>көм-әсә>Көн-әсә (Ҡояш).

Мифология буйынса, был ырыу тармаҡтарының исем-аталышы ошолай хасил:

а) Көб-әс-әр-әк (бүре-әсә-ир-аға) – Көб-**<u>әсәрәк</u>** (сәрәк, сиреү); шунан килә боронғо сығанаҡтарҙағы әс (ас), сәр (царь), сир, сер (сэр), серк этнонимдары. Һәм "әсәрәк"кә -ән сығанаҡ килеш ялғауы теркәлеп, -- әсәрәк+ән= **Үҫәргән**. Ябайлаштырып әйткәндә, "Үҫәргән" этнонимының нигеҙендә "Әсә-Бүре-Көн" термины ята. Телдә оҙаҡ әүмәләнә торғас, ул ***Әс-Әр-Көн*** (Һыу-Ер-Ҡояш) булып "шымарған", ләкин әүәлге мәғәнәһендә ҡала, сөнки, башҡорт мифологияһы буйынса, күктәге Көн аҫҡа төшөп һыу-ер (әс-әр) буйлап йөрөгәнендә бүре ҡиәфәтен алып, шул уҡ "әс-әрә" (һыу-ер)>сәрә (серый волк)>соро (һоро-бүре)>зорро (америка индейҙары телендәге бүре) исемендә йөрөгән. Ошо "әсәрәк"те ҡыҫҡартып әйтеп, әрәк (әрәй/арий) тип тә йөрөткәндәр һәм "әрәк"тән "ирек" – ирекле кешеләр (арийҙар) төшөнсәһе формалашҡан. Был тармаҡтың ораны "Асаба" (әсә-апа "әсә-бүре") һәм ошо төшөнсәнән килә үҫәргән ер хужаларың ләҡәбе **"аҫаба"** – Күктәге Көн менән Айҙы белдереүсе Ҡояш-Көн мәғәнәһендәге термин ул (шунан хасил ырыу тамғаһы Ҡойошҡан), ә уның (Көндөң) ер йөҙөндә тере кәүҙәләнеше *Әсә-Бүре* булған (Көнгә табыныусы **Үҫәргән** ырыуының изге тотемы); ә Үҫәргән менән бер туған **Башҡорт** яғының табыныу

объекты Ай иһә ер йөҙөндә тере Боҙ-инә йәғни бизон-һыйыр, шулай уҡ *Болан-инә* рәүешле кәүҙәләнгән;

б) Көб-әт-әр-әк (бүре-ата-ир-аға)<(көб)**<u>этәрәк</u>**<**төрөк**; шулай уҡ был кешеләр ҙә *эрәкле* – ирекле *ир-арийҙар* булған. Орандары "Атаҡа" (ата-аға – атай-Ай мәғәнәһендә).

Ошо икәүҙән бер бөтөн тәшкил итеүсе һәм киләсәктә бөтәһе бергә **башҡорт** тип аталасаҡ күп ырыулы бөйөк ҡәбиләнең исем-аталыштарын бергә теркәп, **төрк-сир-бөтөн** тип тә төркөмләп йөрөткәндәр (Орхон – Селенга таш ядкәрҙәрендә ырып яҙылған); дөйөм орандары ла *аталыҡты* һәм *әсәлекте* белдереүсе ике оранды бергә теркәүҙән хасил: Атаҡа+Асаба= (А)**<u>таҡасаба</u>** – **Туҡсаба** (хәҙерге үҫәргәндәрҙең бер килкеһе, ҡасандыр айырымланған ырыуҙарҙың, **Ҡыпсаҡ** менән **Үҫәргәндең**, ошо көндә лә бер үк оран йөрөтөүенән сәйерһенеп, буғай, тарихи хаҡиҡәтте боҙоп, "оранnetwork" – Муйтән" тип яңылышалар). Ҡыпсаҡ ырыуының ғәмәлдә шулай уҡ боронғо **сир** -- үҫәргәндәр икәнлеген, шуға күрә орандары ла бер үк (Атаҡа-Асаба – Туҡсаба) икәнлеген баҫымлыҡлап, Ҡыпсаҡ ырыуының Үҫәргәндән айырымланыу сәбәбен һәм дәүерен түбәндәрәк бирербеҙ. Бөйөк Төрки ҡағанат дәүләттәре ошо "түрк-сир-будун"дар (башҡорттар) тарафынан төҙөлгән, донъяға билдәле Орхон – Селенга таш ядкәрҙәрендәге ырын-яҙыуҙар тап шулар хаҡында һөйләй (был хаҡта айырым хеҙмәтем бар). Ә инде картаға ҡайтһаҡ, нәүбәтендә түбәндәге матдәләр дауамлана:

7. Тараз.
8. Шәһәр.
9. Нәзлә -- ғәрәпсә һыуыҡ ер.
10. Жанбаҡ.
11. Бишбалыҡ.
12. Мәсин -- Ҡытай.
13. Жабға -- Япония.
14. Фаику урман йаҡур Алманиһә -- өҫтөнлөксә (башлыса) урман яғыусы (урман яндырып иген баҫыуҙары әҙерләүсе?) Алмания (Германия).
15. Ҡашмир.
16. Жәбин Ҡыбчаҡ – ҡурҡаҡ ҡыпсаҡ.
17. Мискин Ҡыфчаҡ -- меҫкен (ярҙамсыһыҙ, бисара, ярлы) ҡыпсаҡ.
18. Мискин Ҡыфчаҡ – шундай уҡ.

Картанан күренеүенсә, ул замандың ҡыпсаҡ төркөмдәре Иҙел һәм Дон аралығындағы далала (Ҡубан йылғаһы буйындараҡ, урыҫ иле менән сиктәш) өс төркөмгә бүленеп йәшәгән һәм урыҫтар ҙа уларҙы **половец>бала-буҙ** йәғни "буҙ-бүре"ләр тип исемләгән. Әгәр тикшереп ҡараһаҡ, ысынлап та: "бала<балаҡ<**волк" – бүре; буҙ** – көлһыу-күгелйем төҫ (бүре төҫө). Көнбайыш Европа халыҡтарына ла был ҡәүем шулай уҡ **куманы>кубаны** – "көплөләр" йәғни "бүреләр" рәүешле билдәле: ҡоман>көбән, бында "көб" – бүре, -ан – сығанаҡ килеш ялғауы. "Бүреләр"ҙең (үҫәргән һәм уларҙан айырымланған ҡыпсаҡтарҙың) төп сығышы ҡайҙан икәнлеге картанан асыҡлана: **Көбстан** (Бүрестан, хәҙерге Башҡортостан, №6) һәм шундағы **Ҡубан<Көбән** (Бүреләр) ҡалаһы, №31; ошо ерҙән уларҙың бер өлөшө (үҫәргән-нуғайҙар) Көбән (Кубань)

йылғаһы буйына күсенгән, элегерәк тарихи сәбәптәр арҡаһында ҡыпсаҡтарҙың өс төркөмө лә шунда килгән. Каспий диңгеҙенең көньяғындағы “руси сәхәбә” лә (№19) хәҙерге мәғәнәһендәге урыҫтар түгел, ә уларҙың башҡорт-төрки бабалары үҫәргәндәр (“Донъяларҙың төп-үҙәге ҡайҙа?” тигән хеҙмәтемдә ентеклерәк күрһәтелде – интернеттың “башкирский портал”ында). Ә боҙ-һыйыр Бизонға, Боланға табыныусы бәжәнәк-башҡорттар (ҡариаҡу Башҡорт, №28) ул осорҙа үҫәргән-бүреләрҙән айырым – урыҫтарға яҡын сиктәш Дон һәм Днепр аралында йәшәгән; урыҫ йылъяҙмаларынан билдәле “Башҡорт-хан” да, моғайын, “Башҡорт иленең ханы” мәғәнәһендә әйтелгән, ә хандың үҙенең исеме билдәле түгел (бәлки, Ҡоншаҡ<Кончактыр?). Күңелгә яғышһыҙ “ҡурҡаҡ ҡыпсаҡ”, “меҫкен ҡыпсаҡ” ҡушаматтары иһә “ҡыпсаҡ” этнонимының тарихи тамырына -- килеп сығышына бәйле. Ағас көпсәгенә юрап аңлатҡан халыҡ этимологияһын ситтә ҡалдырып, ғалимдарға – тарихҡа мөрәжәғәт ҡылайыҡ.

Көнбайыш Төрки ҡағанатта (империяла) хакимлыҡ иткән баяғы Көб-әсә (Бүре-әсә) тармағы сирҙарҙың (үҫәргәндәрҙең) бер төркөмө 646 йылда уларҙың шул үҙәк хакимиятына ҡаршы баш күтәргән **басмыл – ҡарлыҡ – уйғыр** берләшмәһе тарафынан вәхшиҙәрсә бик ҡаты ҡыйратылып, ҡулға төшкән яугир-ирҙәре Мысыр ғәрәптәренә ҡоллоҡҡа һатылып, ҡасып-боҫоп иҫән ҡалғандарының бер килкеһе, ифрат ҡурҡаҡланып та меҫкенләнеп, тиҙәр, Көбстандың (хәҙерге Башҡортостандың) көнсығыш сигенә -- Ҡыртыш (Иртыш) йылғаһы буйына ҡаса һәм, дошмандарға ҡаршы ҡулына ҡорал тотоп һуғышырҙай ғәййәр ирҙәр булыуҙан тамам төңөлөп, үҙҙәренең “үҫ**әр**гән” этнонимындағы ғорур **әр** (ир, арий) элементынан ваз кисеп (баш тартып), буғай, “сир”һыҙ (яугирһеҙ) ябай “көбәсәк” – әсә-бүре (ҡатын-ҡыҙ) хәленә ҡалырға мәжбүр була; ә ирлегеңдән (арийлығыңдан) баш тартыу ул заманала ҡурҡаҡлыҡтың, меҫкенлектең эталоны һаналғанлыҡтан, үҫәргән-сирҙарҙың шул төркөмдәренә яугир-ирһеҙ ”көпсәк”лек (ҡыпсаҡлыҡ) йәғни “бүре-әсәк”лек ләҡәбе йәбештерелә. Шул йәһәттән ҡаҙаҡ тарихсыһы Рөстәм Абдуманаповтың яҙыуынса, күренекле төркиәтсе С.Г. Кляшторныйҙың фекере бик фәһемле: “Кыпчак – прозвище-оберег с уничижительным значением “злочастный, неудачный, злополучный”. Это значение слова возникло, по мнению ученого, как подмена этнонима **“сир”** в ритуальной практике после падения сирского каганата в 646 году”. Тар-мар ҡылынған бик күп “сир”ҙарҙы, ә тулы әйтелештә “әс-ир”ҙәрҙе (үҫәргән-ирҙәрҙе) Мысыр ғәрәптәренә ҡоллоҡҡа (мәмлүклеккә) һаталар, шул “әс-ир”ҙән **әсир** (пленный) төшөнсәһе барлыҡҡа килә, -- Византияға ҡоллоҡҡа һатылғандарҙың “slave” (славян) этнонимы шулай уҡ “ҡол” төшөнсәһендә инглиз теленә кергәндәй... Берыңғай иҫкәртәйек: мәсьәләне насар белгән, йәки фәндә өҫтөнлөк итеүсе төрки түгел телселәрҙең яңылыш билдәләүе һөҙөмтәһендә “ҡыпсаҡ телдәр” тип төркөмләнгән телдәребеҙ ҙә “үҫәргән телдәр” тип йөрөтөлөргә хаҡлы, сөнки улар нигеҙҙә үҫәргән тел ҡанундарынан тәшкил. Әйткәндәй, XI быуат фарсы авторы Насир Хосров яҙыуынан башланған һәм таралған “дәшт и-ҡыпчаҡ” (“ҡыпсаҡ далаһы”) атамаһына көсәнеп **дәүләт** төшөнсәһе биреү ҙә (мәҫәлән, ҡумыҡ Мурад Аджи кеүектәр) дөрөҫ түгел, сөнки тарихта ҡыпсаҡ дәүләте булмаған, ә улар йәшәгән даланы ғына әлеге Насир Хосров шулай атап ебәргән. Шул хатаның киң таралыуы арҡаһында Сыңғыҙ-хан яулауҙарына дусар булған

һуңғы осор Евразия ҡитғаһындағы һәм Мысырҙағы *бөтә төркиҙәрҙе лә* бер ҡалыптан “ҡыпсаҡ” тип йөрөткәндәр һәм әлегәсә был төҙәтелмәй; мәҫәлән, Мысыр мәмлүктәренең иң атаҡлыларынан булған Насретдин әл-Насири әл-Башҡурди, Сәнжәр әл-Руҡны әл-Башҡурди, Алаитдин Башҡурд әл-Насири, Ғилметдин әл-Башҡурди, Сарын әл-дин әл-Башҡурди, Ҡыратай Хазинадар Ғилметдин әл-Башҡурди, Ғилметдин Сәнжәр әл-Башҡурди, Ғилметдин Башҡурд әл-Насири (Әхмәтзәки Вәлиди Туған. Башҡорттарҙың тарихы. Өфө, “Китап” – 1994, 22-23-өнсө биттәр) һәм Иҙел менән Яйыҡ араһында (Башҡортостанда!) тыуып-үҫеп ун дүрт йәшендә ғәрәптәргә ҡоллоҡҡа һатылған, ә аҙаҡ Мысырҙың бөйөк хакимдарына әүерелгән Бейбарс әл-Бөржәни кеүектәр әлегәсә тарихи әҙәбиәттә әнә шул яһалма “бөйөк ҡыпсаҡтар” ләҡәбенән арынмай...

Икенсе осор тыуа: Сыңғыҙ-хан яулауҙары барышында ҡыпсаҡлыҡ ҡалыбы онотолоп, бөтә төркиҙәргә “татар” ләҡәбе тағыла һәм заманында карталарҙа Евразия ҡитғаһы, тулыһынса, тип әйтерлек, “Тартария” тип тамғалана (хәҙер быны Ҡазан пантатаристары кинәнеп файҙалана). Сәбәбе: әлеге карталағы Иҙел – Дон аралында ҡыпсаҡтарға күрше “татар йорто” (№27) булған; Сыңғыҙ-хан шул татар һуғышсыларын (үҙенең атаһын үлтергән ҡан-дошмандарын), күберәк ҡырылһындар өсөндөр инде, көнбайыш фронтта һуғыштың алғы сафына ҡуйып файҙалана, шуға күрә иң элек шуларҙан зыян күргән европалы халыҡтар бөйөк хандың бөтә илен яңылыш рәүештә **татарҙар** тип исемләй...

19. Руси сәхабә -- урыҫ-йомарт (боронғо Үҫәргән ҡәбиләһенең әр/ир-әс – ир-әсә яҡ тармағы).

20. Бәжәнәк – йәки печенег, ә асылы боронғо төп башҡорт; Кейәү>Киев ҡалаһын нигеҙләүселәр.

21. Дербенд Хазаран – Хазар дәүләтенең ҡалаһы Дербент.

22. Мжал-Басҡун – көслө баҫҡынсылар.

23. Хуаризм – Хорезм.

24. Табаристан арғи – арғы Табаристан.

25. Алдым ҡала – урыҫтарҙың Владимир ҡалаһы.

26. Саҡалба – саҡ-албан (хәҙерге Алания – Осетия), элекке төрки-славяндар.

27. Ҡариаҡу Татар – Татар йорто.

28. Ҡариаҡу Башҡорт – Башҡорт (Бәжәнәк) йорто, Дон һәм Днепр аралында.

29. Барсмәнд – Бүре-әсә (барс) ҡорамы йәғни Бүре-әсәгә табыныусы **барсилдар** (бүре-әсә иле – үҫәргәндәр) ҡалаһы; ул тарихи Башҡортостандың мәркәз ҡалаһы “Журжан” – Үҫәргән (хәҙерге Өфө №32) менән йәнәшә тора. VI быуатта барсилдар Ҡафҡазға барып урынлаша һәм Бүре-әсә-иле<**Берсилия** тигән дәүләт ҡороп йәшәй, шуға мәңгелек һәйкәл булып унда Эльбрус һәм Эльбурс (Ил-бүре-әсә) тауҙары тора.

30. Аж – Ижау>Ижевск ҡалаһы.

31. “Хҙн” -- Ҡыҙан – Ҡыҙ-ҡала. Ағиҙелгә Өфө ҡойған саталыҡта – Ағиҙелдең уң ярында (Иглин районының Аҡбирҙе аулынан 2,5 км көньяҡ-көнсығыштараҡ), Өфөнөң һул яғында урынлашҡан боронғо ҡалабыҙ, хәҙер уның

емеректәрен урындағы кешеләр Ҡыҙ-ҡала-тау тип йөрөтә (Археологическая карта Башкирии, М., 1976, 140-сы бит, №1184).

32. Ҡойроҡло "ж" менән яҙылыштағы "Жржн" – Жәр-жән – Сәр-йән, йәғни Үҫәргән (Үҫәргән ҡәбиләһенең исемен,ҡыҫҡартып, Әсәр, Сәр тип тә йөрөткәндәр, ғәрәп яҙыуында, баяғыса, "жәр" тип алынған), был иһә хәҙерге Өфө ҡалаһы, Өфө йылғаһының һәм Ағиҙелдең уң ярындағы сатала.

33. Ҡушан.

34. Варнак – Бүре-анаҡ<**Варяг**, Балтик диңгеҙе буйындағы **үҫәргән-бөрйән, өпәй** башҡорттары нигеҙләгән һәм йәшәгән Бүре-әсә-өйө>**Пруссия** дәүләте (хәҙерге Рәсәй Федерацияһының Калининград өлкәһе).

35. Болғар – Каспий диңгеҙенең көньяҡ-көнбайышындағы **тәүге Болғар** ҡалаһы (Иҙел буйы Болғарға тиклемгеһе).

36. Суар – Каспий диңгеҙенең көньяҡ-көнбайышындағы **тәүге Сувар** ҡалаһы (Иҙел буйы Суварға тиклемгеһе).

Инде Мәхмүт Ҡашғари китабына йәбештерелгән баяғы карта (еңел аңлайышлы булһын өсөн мин уны, хәҙергесә итеп, 45 градус һулға әйләндереп ҡуйҙым) эстәлегенә күсәйек.

Тарихи башҡорт ерҙәре һәм сал-боронғо, үҙебеҙгә ныҡ ҡағылышлы мәркәзебеҙ Өфө ҡалаһы ла (№32, карталағы исеме ҡойроҡло "ж" хәрефе менән "Жржн") күрһәтелгән был ҡиммәтле ҡомартҡылағы бер килке объекттарҙы мин ғәрәп цифрҙары менән өҫтәлмә рәүештә нумерлап-аңлатып сыҡтым, бына шуларҙың теҙмәһе:

37. Иҙел йылғаһы (картала исемһеҙ).

38. Жәйхун ("Жихун" – Жаиҡ-ын) – Яйыҡ (Урал) йылғаһы.

39. Рәмил -- Ирәмәл (Урал тауҙарының бер буйы – көньяҡтағы Ирәндек).

40. Рәмил -- Ирәмәл (Урал тауҙарының икенсе буйы – төньяҡтағы Ирәндек).

41. Бесермән – хәҙерге Саратов.

42. Тараз.

43. Шәһәр.

44. Нәзлә -- ғәрәпсә һыуыҡ ер.

45. Жанбаҡ.

46. Бишбалыҡ.

47. Мәсин -- Ҡытай.

48. Жабға -- Япония.

49. Фаику урман йаҡур Алманиһә -- өҫтөнлөксә (башлыса) урман яғыусы (урман яндырып иген баҫыуҙары әҙерләүсе?) Алмания (Германия).

50. Ҡашмир.

51. Жәбин Ҡыбчаҡ – ҡурҡаҡ ҡыпсаҡ.

52. Мискин Ҡыфчаҡ -- меҫкен (ярҙамсыһыҙ, бисара, ярлы) ҡыпсаҡ.

53. Мискин Ҡыфчаҡ – шундай уҡ.

Картанан күренеүенсә, ул замандың ҡыпсаҡ төркөмдәре Иҙел һәм Дон аралындағы далала (Ҡубан йылғаһы буйындараҡ, урыҫ иле менән сиктәш) өс төркөмгә бүленеп йәшәгән һәм урыҫтар ҙа уларҙы **половец>бала-буҙ** йәғни "буҙ-бүре"ләр тип исемләгән. Әгәр тикшереп ҡараһаҡ, ысынлап та:

“бала<балаҡ<**волк” – бүре; буҙ** – көлһыу-күгелйем төҫ (бүре төҫө). Көнбайыш Европа халыҡтарына ла был ҡәүем шулай уҡ **куманы>кубаны** – “көплөләр” йәғни “бүреләр” рәүешле билдәле: ҡоман>көбән, бында “көб” – бүре, -ан – сығанаҡ килеш ялғауы. “Бүреләр”ҙең (үҫәргән һәм уларҙан айырымланған ҡыпсаҡтарҙың) төп сығышы ҡайҙан икәнлеге картанан асыҡлана: **Көбстан** (Бүрестан, хәҙерге Башҡортостан, №6) һәм шундағы **Ҡубан<Көбән** (Бүреләр) ҡалаһы, №31; ошо ерҙән уларҙың бер өлөшө (үҫәргән-нуғайҙар) Көбән (Кубань) йылғаһы буйына күсенгән, элегерәк тарихи сәбәптәр арҡаһында ҡыпсаҡтарҙың өс төркөмө лә шунда килгән. Каспий диңгеҙенең көньяғындағы “руси сәхәбә” лә (№19) хәҙерге мәғәнәһендәге урыҫтар түгел, ә уларҙың башҡорт-төрки бабалары үҫәргәндәр (“Донъяларҙың төп-үҙәге ҡайҙа?” тигән хеҙмәтемдә ентеклерәк күрһәтелде – интернеттың “башкирский портал”ында). Ә боҙ-һыйыр Бизонға, Боланға табыныусы бәжәнәк-башҡорттар (ҡариаҡу Башҡорт, №28) ул осорҙа үҫәргән-бүреләрҙән айырым – урыҫтарға яҡын сиктәш Дон һәм Днепр аралында йәшәгән; урыҫ йылъяҙмаларынан билдәле “Башҡорт-хан” да, моғайын, “Башҡорт иленең ханы” мәғәнәһендә әйтелгән, ә хандың үҙенең исеме билдәле түгел (бәлки, Ҡоншаҡ<Кончактыр?). Күңелгә яғышһыҙ “ҡурҡаҡ ҡыпсаҡ”, “меҫкен ҡыпсаҡ” ҡушаматтары иһә “ҡыпсаҡ” этнонимының тарихи тамырына -- килеп сығышына бәйле сит ҡәүемдәр тарафынан бирелгән булһа кәрәк. Ағас көпсәгенә юрап аңлатҡан халыҡ этимологияһын ситтә ҡалдырып, ғалимдарға – тарихҡа мөрәжәғәт ҡылайыҡ.

Көнбайыш Төрки ҡағанатта (империяла) хакимлыҡ иткән баяғы Көб-әсә (Бүре-әсә) тармағы сирҙарҙың (үҫәргәндәрҙең) бер төркөмө 646 йылда уларҙың шул үҙәк хакимиятына ҡаршы баш күтәргән **басмыл – ҡарлыҡ – уйғыр** берләшмәһе тарафынан вәхшиҙәрсә бик ҡаты ҡыйратылып, ҡулға төшкән яугир-ирҙәре Мысыр ғәрәптәренә ҡоллоҡҡа һатылып, ҡасып-боҫоп иҫән ҡалғандарының бер илкеһе, ифрат ҡурҡаҡланып та меҫкенләнеп, тиҙәр, Көбстандың (хәҙерге Башҡортостандың) көнсығыш сигенә -- Ҡыртыш (Иртыш) йылғаһы буйына ҡаса һәм, дошмандарға ҡаршы ҡулына ҡорал тотоп һуғышырҙай ғәййәр ирҙәр булыуҙан тамам төңөлөп, үҙҙәренең “үҫ**әр**гән” этнонимындағы ғорур **әр** (ир, арий) элементынан ваз кисеп (баш тартып), “сир”һыҙ (яугирһеҙ) ябай “көбәсәк” – әсә-бүре (ҡатын-ҡыҙ) хәленә ҡалырға мәжбүр була; ә ирлегеңдән (арийлығыңдан) баш тартыу ул заманала ҡурҡаҡлыҡтың, меҫкенлектең эталоны һаналғанлыҡтан, үҫәргән-сирҙарҙың шул төркөмдәренә яугир-ирһеҙ ”көпсәк”лек (ҡыпсаҡлыҡ) йәғни “бүре-әсәк”лек ләҡәбе йәбештерелә. Шул йәһәттән ҡаҙаҡ тарихсыһы Рөстәм Абдуманаповтың яҙыуынса, күренекле төркиәтсе С.Г. Кляшторныйҙың фекере бик фәһемле: “Кыпчак – прозвище-оберег с уничижительным значением “злочастный, неудачный, злополучный”. Это значение слова возникло, по мнению ученого, как подмена этнонима **“сир”** в ритуальной практике после падения сирского каганата в 646 году”. Тар-мар ҡылынған бик күп “сир”ҙарҙы, ә тулы әйтелештә “әс-ир”ҙәрҙе (үҫәргән-ирҙәрҙе) Мысыр ғәрәптәренә ҡоллоҡҡа (мәмлүклеккә) һаталар, шул “әс-ир”ҙән **әсир** (пленный) төшөнсәһе барлыҡҡа килә, -- Византияға ҡоллоҡҡа һатылғандарҙың “slave” (славян) этнонимы шулай уҡ “ҡол” төшөнсәһендә инглиз теленә кергәндәй... Берыңғай иҫкәртәйек: мәсьәләне насар белгән, йәки фәндә өҫтөнлөк итеүсе төрки түгел телселәрҙең

яңылыш билдәләүе һөҙөмтәһендә "ҡыпсаҡ телдәр" тип төркөмләнгән телдәребеҙ ҙә "үҫәргән телдәр" тип йөрөтөлөргә хаҡлы, сөнки улар нигеҙҙә үҫәргән тел ҡанундарынан тәшкил. Әйткәндәй, XI быуат фарсы авторы Насир Хосров яҙыуынан башланған һәм таралған "дәшт и-кыпчаҡ" ("ҡыпсаҡ далаһы") атамаһына көсәнеп **дәүләт** төшөнсәһе биреү ҙә (мәҫәлән, ҡумыҡ Мурад Аджи кеүектәр) дөрөҫ түгел, сөнки тарихта *ҡыпсаҡ дәүләте* булмаған, ә улар йәшәгән даланы ғына әлеге Насир Хосров шулай атап ебәргән. Шул хатаның киң таралыуы арҡаһында Сыңғыҙ-хан яулауҙарына дусар булған һуңғы осор Евразия ҡитғаһындағы һәм Мысырҙағы *бөтә төркиҙәрҙе лә* бер ҡалыптан "ҡыпсаҡ" тип йөрөткәндәр һәм әлегәсә был төҙәтелмәй; мәҫәлән, Мысыр мәмлүктәренең иң атаҡлыларынан булған Насретдин әл-Насири әл-Башҡурди, Сәнжәр әл-Руҡны әл-Башҡурди, Алаитдин Башҡурд әл-Насири, Ғилметдин әл-Башҡурди, Сарын әл-дин әл-Башҡурди, Ҡыратай Хазинадар Ғилметдин әл-Башҡурди, Ғилметдин Сәнжәр әл-Башҡурди, Ғилметдин Башҡурд әл-Насири (Әхмәтзәки Вәлиди Туған. Башҡорттарҙың тарихы. Өфө, "Китап" – 1994, 22-23-өнсө биттәр) һәм Иҙел менән Яйыҡ араһында (Башҡортостанда!) тыуып-үҫеп ун дүрт йәшендә ғәрәптәргә ҡоллоҡҡа һатылған, ә аҙаҡ Мысырҙың бөйөк хакимдарына әүерелгән Бейбарс әл-Бөржәни кеүектәр әлегәсә тарихи әҙәбиәттә әнә шул яһалма "бөйөк ҡыпсаҡтар" ләҡәбенән арынмай...

Икенсе осор тыуа: Сыңғыҙ-хан яулауҙары барышында ҡыпсаҡлыҡ ҡалыбы онотолоп, бөтә төркиҙәргә "татар" ләҡәбе тағыла һәм заманында карталарҙа Евразия ҡитғаһы, тулыһынса, тип әйтерлек, "Тартария" тип тамғалана (хәҙер быны Ҡазан пантатаристары кинәнеп файҙалана). Сәбәбе: әлеге карталағы Иҙел – Дон аралында ҡыпсаҡтарға күрше "татар йорто" (№27) булған; Сыңғыҙ-хан шул татар һуғышсыларын (үҙенең атаһын үлтергән ҡан-дошмандарын), күберәк ҡырылһындар өсөндәр инде, көнбайыш фронтта һуғыштың алғы сафына ҡуйып файҙалана, шуға күрә иң элек шуларҙан зыян күргән европалы халыҡтар бөйөк хандың бөтә илен яңылыш рәүештә **татарҙар** тип исемләй...

54. Руси сәхабә -- урыҫ-йомарт (боронғо Үҫәргән ҡәбиләһенең ир-әс – ир-әсә яҡ тармағы).

55. Бәжәнәк – йәки печенег, ә асылы боронғо төп башҡорт; Кейәү>Киев ҡалаһын нигеҙләүселәр.

56. Дербенд Хазаран – Хазар дәүләтенең ҡалаһы Дербент.

57. Мжал-Басҡун – көслө баҫҡынсылар.

58. Хуаризм – Хорезм.

59. Табаристан арғи – арғы Табаристан.

60. Алдым ҡала – урыҫтарҙың Владимир ҡалаһы.

61. Саҡалба – саҡ-албан (хәҙерге Алания – Осетия), элекке төрки-славяндар.

62. Ҡариаҡу Татар – Татар йорто.

63. Ҡариаҡу Башҡорт – Башҡорт (Бәжәнәк) йорто, Дон һәм Днепр аралында.

64. Барсмәнд – Бүре-әсә (барс) ҡорамы йәғни Бүре-әсәгә табыныусы **барсилдар** (бүре-әсә иле – үҫәргәндәр) ҡалаһы; ул тарихи Башҡортостандың мәркәз ҡалаһы "Журжан" – Үҫәргән (хәҙерге Өфө №32) менән йәнәшә тора. VI

быуатта барсилдар Ҡафҡазға барып урынлаша һәм Бүре-әсә-иле<**Берсилия** тигән дәүләт ҡороп йәшәй, шуға мәңгелек һәйкәл булып унда Эльбрус һәм Эльбурс (Ил-бүре-әсә) тауҙары тора.

65. Аж – Ижау>Ижевск ҡалаһы.

66. “Хҙн” -- Ҡыҙан – Ҡыҙ-ҡала. Ағиҙелгә Өфө ҡойған саталыҡта – Ағиҙелдең уң ярында (Иглин районының Аҡбирҙе аулынан 2,5 км көньяҡ-көнсығыштараҡ), Өфөнөң һул яғында урынлашҡан боронғо ҡалабыҙ, хәҙер уның емеректәрен урындағы кешеләр Ҡыҙ-ҡала-тау тип йөрөтә (Археологическая карта Башкирии, М., 1976, 140-сы бит, №1184).

67. Ҡойроҡло “ж” менән яҙылыштағы “Жржн” – Жәр-жән – Сәр-йән, йәғни Үҫәргән (Үҫәргән ҡәбиләһенең исемен,ҡыҫҡартып, Әсәр, Сәр тип тә йөрөткәндәр, ғәрәп яҙыуында, баяғыса, “жәр” тип алынған), был иһә хәҙерге Өфө ҡалаһы, Өфө йылғаһының һәм Ағиҙелдең уң ярындағы сатала.

68. Ҡушан.

69. Варнак – Бүре-анаҡ<**Варяг**, Балтик диңгеҙе буйындағы **үҫәргән-бөрйән, өпәй** башҡорттары нигеҙләгән һәм йәшәгән Бүре-әсә-өйө>**Пруссия** дәүләте (хәҙерге Рәсәй Федерацияһының Калининград өлкәһе).

70. Болғар – Каспий диңгеҙенең көньяҡ-көнбайышындағы **тәүге Болғар** ҡалаһы (Иҙел буйы Болғарға тиклемгеһе).

71. Суар – Каспий диңгеҙенең көньяҡ-көнбайышындағы **тәүге Сувар** ҡалаһы (Иҙел буйы Суварға тиклемгеһе).

Әгәр ҙә ки был картала ғәрәпсә билдәләргә ҡарап юҫыҡланһаҡ, зирәкйән уҡыусыбыҙ, әлбиттә, ундағы донъя яҡтары (стороны света) тейешле үҙ урындарында түгеллеген (мәҫәлән, күнегелгәнебеҙҙең киреһе булараҡ, аҫта – төньяҡ, өҫтә -- көньяҡ, һулда – көнсығыш, уңда көнбайыш), шуға бәйле байтаҡ географик атамалар ҙа ғәмәлдәге үҙ урындарында булмауын абайлаясаҡ. Әйтәйек, мин номерлап билдәләгән һәм билдәләмәгән йылғалар – Иҙел, Яйыҡ, Ҡубан, Дон, Днепр, Дунай һыуҙары Каспий-Арал һәм Ҡара-Аҙау диңгеҙҙәренә, көтөлмәгәнсә, көньяҡтан килеп ҡоя; Ирәмәл (яҙыуҙа Рмл – Бәғзе берәүҙәр уны ғәрәптең “ҡом” тигән һүҙе йәғни ҡом сүле, тип уҡый) аталмыш ике армыт Урал тауҙары, шул яҡтағы мәңгелек ҡалабыҙ Өфө һ.б. ҙа – Каспий диңгеҙенең көньяғында имеш. Йәнә килеп, ғәмәли урынлашыуында Төньяҡ боҙло океан ҡырыйындағы өскөл һыҙатлы ҡара һыу яҡҡылығы (“Әҙәм ғалиһөссәләм тыуған ер”) – Урал тауҙарының төньяҡ осондағы өскөлләнеп ҡитғабыҙға кергән (көнсығыш яры – Ямал ярымутрауы, көнбайыш яғында Вайгач утрауы һәм Ҙур ер тундраһы) Ҡар (Карское) диңгеҙ ҡултығы ла – көньяҡта... Карталағы ҡалын көрән һыҙыҡ менән кәртәләнгән “көнсығыш”ты һәм нәҙек көрән һыҙыҡлап тирәсләнгән “көнбайыш”ты ла ғәрәп картографтары боронғо башҡорт картаһына үҙбелдекле килтереп “йәбештергән” булһа кәрәк. Шул арҡала Һиндостан, “негрҙар иле” һ.б. – төньяҡта, ә “фарсылар иле”, Хөрәсән, “ике Ираҡ иле”, Әзербайжан, “ҡурдтар иле”, “Мысыр сиктәре”, Александрия ҡалаһы һ.б. – көнбайышта булып сыға.

Шуға күрә был ҡомартҡы ифрат бәхәсле һанала, уны, моғайын, киләсәк географтарыбыҙ төпсөнөп төбөнә туҙ ҡуйыр. Быуаттар дауамында төп нөсхәгә кемдәрҙеңдер билдәләмәләре, төҙәтмәләре, өҫтәлмәләре керетелеп, ҡайһы бер

яңылышлыҡтар ыраһа ла, ҡомартҡының төп башҡорт өлөшө һау ҡалған һәм ул асыҡ таныла.

Башҡорт һәм Башҡортостан тарихына ҡағылышлы ошо мәҡәләне баҫма матбуғатҡа үткәрә алғаным юҡ, ләкин ҡасан да донъяға сығырына өмөтләнәм, сөнки тере ҡуҙҙы һис кенә лә һалам аҫтында йәшереп булмай бит.

04.04.2010.
31.12.2010
09.12.2011